2023 йыл
15 февраль
ШАРШАМБЫ
№ 7
(2302)

Хаҡы һатыуҙа ирекле

# АШҠАҘАР

Башҡортостан Республикаһы Стәрлетамаҡ ҡалаһының ижтимағи-сәйәси гәзите

Теле барҙың - иле бар

Гәзит 1990 йылдың ғинуарынан сыға. 12 +

www.ashkadar.com vk.com/ashkadarstr ok.ru/group/56151266951289

Әхнәф: "Эй, әсәй, мин тик Ғәлиәне генә яратам шул", – тине. Ә бына Ғәлиәне яратыр микән әсәһе? Шулай ҙа күңде әсә йөрәге – бер көн йәштәр бик матур итеп кейенеп килеп инделәр ҙә: "Әсәй, беҙ ғариза яҙҙыҡ, өйләнешәбеҙ", – тинеләр. Әлбиттә, әсәһе үҙенең риза түгеллеген белгертмәскә тырышты...

**Артабан был ғаиләне ниндәй һынау көткәне хаҡында 7-се биттә уҡығыҙ.**

СОЦИАЛЬ ЯҠЛАУ

## Яугирҙәргә "Ҡайынҡай"ҙа бушлай ял

**Стәрлетамаҡтың "Ҡайынҡай" ("Березка") шифаханаһы Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы яҡташтарыбыҙҙы "Ҡайынҡай"ҙа ял итергә саҡыра. Ял бушлай, дәүләт иҫәбенә.**

Шифахана махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙы дауалауға бюджеттан бүленгән субсидиялар алыусылар иҫәбенә ингән. "Ҡайынҡай" шифаханаһына барыу өсөн түбәндәге документтар кәрәк буласаҡ: паспорт, шифахана-курорт картаһы һәм махсус хәрби операцияла ҡатнашыуҙы раҫлаусы махсус документ.

Хөрмәтле яҡташтарыбыҙ, төрлө шифалы үҙенсәлектәре менән заманса дауалау алымдарын берләштергән комплексҡа барып ял итеп, дауаланып ҡайтығыҙ!

**Г. ИЛЬЯМОВА.**

СӘНӘҒӘТ

## Сода хәҙер пластик һауытта ла буласаҡ



**Башҡорт сода компанияһы етештергән аш содаһы хәҙер, картон каптан тыш, пластик һауытта ла сыға башлаясаҡ.**

Төргәкләүҙең яңы форматы ҡулланыусыларҙың ихтыяжын иҫәпкә ала, продуктты ҡулланыу уңайлыраҡ булһын өсөн, ул ҡапҡас-дозатор менән сығарыласаҡ.

– Аш содаһының сифатына килгәндә, ниндәй һауытта булһа ла, уларҙың айырмаһы юҡ. Барыбер шул уҡ беҙҙең компания етештергән продукция, – ти "Башҡорт сода компанияһы" АЙ генераль директоры Эдуард Давыдов.

Пластик һауытта йылына 5,5 мең тонна тирәһе аш содаһы етештерергә уйлайҙар.

**Р. ЙӘЛИЛЕВА.**

МАТБУҒАТ – 2023




# БЕР ҠУРЕШЕҮ – ҮҘЕ БЕР ҒҮМЕР

## Осрашырға матур сәбәптәр генә булһын

**Бына бит, дуҫтар барҙа тормош йәмле, тормош матур. Ҡалабыҙҙа һәм Стәрлетамаҡ районында берҙән-бер башҡорт гәзите "Ашҡаҙар" ҙа, тоғро дуҫтары булғанда, оҙаҡ йылдар яңылыҡтары, замандаштар, ҡала йәшәйеше хаҡында мәҡәләләре, тормоштоң кире күренештәре тураһында яҙмалары менән сығыр ҙа сығыр әле.**

Йәнә гәзит алдырыусылар араһында бүләк уйнатып, кемдәр килә алған, уларға бүләктәрен тапшырып та ҡуйҙыҡ. Бер юлы дүрт рухлы гәзит алдырыусы менән осраштыҡ. Әйткәндәй, бүләктәр кемгә яҙғаны тураһында мәҡәлә гәзитебеҙҙең 5-се һанында сыҡты.

Шулай итеп, Нурия апай Йомағужина – тажин (манты бешерер өсөн һауыт) отҡайны. Нурия Фуат ҡыҙы гәзитте "Стәрле таңдары" исеме аҫтында сыға башлаған тәүге һандарынан уҡ алдыра икән. Әлеге ваҡытта хаҡлы ялда, бөтә ғүмерен Стәрлетамаҡ коррекцион мәктәп-интернатта һаңғырыу һәм насар ишетеүсе балаларға белем һәм тәрбиә биреүгә арнаған.

– Беҙҙең мәктәп элек-электән гәзит-журналдарға иғтибарлы булды. Мәктәптә башҡорт теле уҡытыу буйынса ла эш алып барыла, шуға милли баҫмалар ҙа һәр саҡ эш өҫтәлендә ята ине. Аллаға шөкөр, эш урыным менән аралар өҙөлмәй, интернат-мәктәптә булған ваҡиғалар менән хәбәрҙар булып торам. Шуныһы һөйөнөслө: "Ашҡаҙар" гәзитен унда әле лә ихлаҫлап ҡулләп алдыралар, балаларҙың өндәрен үҫтереү йәһәтенән материал булараҡ та ҡулланалар, – тип һөйләп үтте ул гәзиттең мәғариф өлкәһендәге әһәмиәте тураһында.

**(Аҙағы 7-се биттә).**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## Ике дауахананы берәү итәләр

**Стәрлетамаҡта быйыл 1 июнгә тиклем ҡаланың 1-се һәм 2-се дауаханаларын берләштерәләр.**

1-се дауахананың баш табибы Андрей Палтусов әйтеүенсә, медицина ярҙамы күрһәтеүҙә бер ниндәй ҙә үҙгәрештәр булмаясаҡ. Дауаханалар ҡәҙимгесә эшләүен дауам итәсәк. "Дауаханалар кадрҙар ресурстарын рациональ ҡулланыу өсөн берләштерелә", – тип билдәләнә ул.

2-се дауахананы 1-сеһенә ҡушҡанда, ул хоҡуҡтары, бурыстары һәм милке менән тапшырыласаҡ. Әммә төп эшмәкәрлек маҡсаттары һаҡланасаҡ.






Медицина учреждениеларын үҙгәртеп ҡороуҙан йылына 16 миллион һум иҡтисади файҙа киләсәк, тип күҙаллана. Медицина хеҙмәткәрҙәре штаты хеҙмәтләндерелгән халыҡты иҫәпкә алып формалашасаҡ. Шулай уҡ, БР һаулыҡ һаҡлау министрлығында билдәләүҙәренсә, дауаханаларҙы ҡушыу ҡоралмалдарҙы, дарыуҙарҙы комплекслы һәм оператив һатып алырға булышлыҡ итәсәк.

Бынан тыш, ул административ хеҙмәттәрҙе үҙәкләштереүгә килтерәсәк һәм бина лардағы бүлмәләрҙең бер өлөшөн медицина ярҙамы күрһәтеү өсөн бушатырға мөмкинселек бирәсәк. Стәрлетамаҡ ҡалаһы һәм Стәрлетамаҡ районы халҡы өсөн медицина ярҙамы алыу мөмкинлеген арттырырға булышлыҡ итәсәк.

**Р. САФИНА.**

podpiska.pochta.ru

МИЛЛИ ПРОЕКТТАР

## Ҡытайға май оҙатабыҙ

**Шишмә май экстракцияһы заводы үткән йыл производствоны яңыртыу арҡаһында «Халыҡ-ара кооперация һәм экспорт» милли проектының «БР агросәнәғәт комплексы продукцияһы» төбәк проекты сиктәрендә рапс майы етештереүҙе өслөтә арттырҙы. Республикала иң эре экспортер булараҡ, Шишмә май заводы хәҙер бер нисә йыл инде үҙенең продукцияһын Европаға һәм Ҡытайға оҙата.**

2022 йылда ул производствоны яңыртыуға 137 миллион һум инвестициялаған. Май продукцияһы Башҡортостандың агросәнәғәт комплексы продукцияһын экспортлау күләмендә күпселекте тәшкил итә. Былтырғы йомғаҡтарға ҡарағанда, 177,7 миллион АҠШ доллары күләмендә продукция экспортланған.

Әйткәндәй, Ҡытай Халыҡ Республикаһында рапс майына ихтыяж ҙур, уны аҙыҡ-түлек өсөн ҡулланалар. Февраль аҙағына тиклем рапс майы тейәлгән ике тимер юл составы Ҡытайға юлланасаҡ.

Быйыл “Башҡортостан Республикаһы агросәнәғәт комплексы продукцияһы экспорты” төбәк проекты буйынса 167 миллион долларлыҡ күрһәткескә өлгәшеү планлаштырыла. Рәсәй Президенты Владимир Путиндың май указы менән раҫланған “Халыҡ-ара кооперация һәм экспорт” милли проектына ярашлы, 2024 йылға был һан 223,9 миллион долларға етергә тейеш.

**Р. ЗАМАНОВА.**

***ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП,***

## 48,5 миллиард һум йәлеп ителгән

**Башҡортостанда милли проекттарға 48,5 миллиард һум йәлеп ителгән. Республика Башлығы Радий Хәбиров билдәләүенсә, был күрһәткес 2021 йыл менән сағыштырғанда ике тапҡырға артҡан. Шул уҡ ваҡытта, ҙур социаль объекттар төҙөлөшөн ваҡытында тамамлау мәсьәләһе лә күтәрелде.**

Ысынлап та, ҙур төҙөлөштәрҙе ваҡытында ослап ҡуйыу – асыҡ мәсьәлә. Сөнки төрлө сәбәптәр арҡаһында, төҙөүселәр эштәрен ваҡытында тамамлап өлгөрмәй, ә был иһә ниндәйҙер объекттың һуңлап эш башлауына килтерә. Мәҫәлән, быйыл да күләмле хеҙмәт һәм финанстар талап иткән объекттар байтаҡ. Милли проект программаларына ярашлы 7 мәктәп, 6 дауахана һәм поликлиника, 7 мәҙәниәт учреждениеһы, 17 инженер һәм транспорт инфраструктураһы объектын төҙөп бөтөү, 75 фельдшер-акушер пунктын булдырыу күҙаллана.

Шулай уҡ ултырыш барышында, милли һәм федераль проекттарҙы ғәмәлгә ашырыуҙа төрлө етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү мәсьәләләре лә ҡаралды.

**Э. МӨНИРОВ.**

## Өлкәндәрҙе хәстәрләп

**Башҡортостанда ике йөҙҙән ашыу оло йәштәге кешене аҫрауға алғандар. Үткән йылда ғына ла тәрбиәгә мохтаж егерме яңғыҙаҡ ҡартты ғаиләләр ҡарауға алған.**

Ҡарауға алған ғаилә айына 6200 һум аҡса ала. Әгәр ҙә беренсе төркөм инвалиды йә иһә 80 йәште уҙған булһа, ул сакта ай һайын 8060 һум түләнә. Проект эшләй башлағаны бирле 247 патронат ғаилә 263 кешене ҡарауға алған. Әле 108 ғаиләлә 113 кеше көн күрә. Ул “Демография” милли проектының “Өлкән быуын” федераль проекты сиктәрендә тормошҡа ашырыла.

**Р. ЙӘЛИЛЕВА.**

АКТИВТАР

# ЙЫЛ ЙОМҒАҠТАРЫ НИМӘЛӘР ТУРАҺЫНДА ҺӨЙЛӘЙ?

**Стәрлетамаҡ ҡалаһы гел үҙенең үҙенсәлекле осрашыуҙар, фестивалдәр, ултырыштар ойоштороуы менән башҡа ҡалаларҙан айырылып тора. Бына яңыраҡ ҡаланың төрлө тармаҡтарына йомғаҡ яһау ҙа ошоноң асыҡ дәлиле.**



Үткән аҙнала ҡала мәҙәниәт һарайында ҡаланың төҙөлөш өлкәһе буйынса йомғаҡ яһалды. Сарала Башҡортостандың төҙөлөш һәм архитектура министры урынбаҫары Артём Ковшов, Стәрлетамаҡ ҡала хакимиәте башлығы Рөстәм Ғәзизов, хакимиәт башлығының төҙөлөш буйынса беренсе урынбаҫары Эмиль Шәймәрҙәнов һәм ҡала төҙөүселәре ҡатнашты.

Рөстәм Фәрит улы сәләмләү һүҙендә ағымдағы йылға төҙөлөш эшмәкәрлегенең төп бурыстарын билдәләне. Был – буш төҙөлөш майҙансыҡтарын булдырыу, уларҙы инженерлыҡ инфраструктураһы менән тәьмин итеү, сафҡа индерелгән торлаҡ күләмен арттырыу, торлаҡты реновациялау, биналарҙы ремонтлау һәм яңыларын төҙөү мәсьәләләрен хәл итеү.

– Ҡуйылған маҡсаттарға ирешеү өсөн төрлө ҡоралдар ҡулланасаҡбыҙ. Шул иҫәптән милли проекттарҙа, федераль программаларҙа ҡатнашыу, территорияларҙы комплекслы үҫтереү механизмын ҡулланыу, – тине Рөстәм Ғәзизов.

2023 йылға эш йомғаҡтары һәм пландар хаҡында хакимиәт башлығының урынбаҫары Эмиль Шәймәрҙәнов ентекләп һөйләне. Һөҙөмтәләргә ҡарағанда, уҙған йылды ҡала яҡшы күрһәткестәр менән тамамлаған.

Уҙған йыл йомғаҡтары буйынса торлаҡ төҙөлөше күләме буйынса “Башҡортостан Республикаһының торлаҡ төҙөлөше” төбәк проектының күрһәткесе 34 процентҡа арттырып үтәлгән. 2021 йылда 65 мең квадрат метр торлаҡ сафҡа индерелһә, 2022 йылда был күрһәткес 94 мең квадрат метр тәшкил иткән. 1300-ҙән ашыу ғаилә торлаҡ шарттарын яҡшырта алған. Улай ғына ла түгел, алданған өлөшсөләр проблемаһын хәл итеү буйынса ла ҙур эш башҡарылды. Уларҙың 64-е фатир асҡыстары алды. Башҡортостандың төҙөлөш һәм архитектура министры урынбаҫары Артём Ковшов Стәрлетамаҡ республикала был проблеманы хәл иткән тәүге ҡалаларҙың береһе булыуын да билдәләне.



**Ҡала етәксеһе Р. Ғәзизовтан награда.**

Транспорт һәм социаль инфраструктуралар тураһында һөйләгәндә, Эмиль Владиславович уҙған йылда “Торлаҡ һәм ҡала мөхите” милли проекты сиктәрендә Яр буйы урамы, Ботаник, Ҡырым урамдары, Академик Королев проспекты, Суханов урамынан алып Гоголь урамы буйлап юл төҙәлдә, тине. Уның оҙонлоғо 1060 метр тәшкил итә.

Заманса ысынбарлыкта төҙөлөш тармағы ҡоралдарынның береһе булып милли проекттар тора. Мәҫәлән, “Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар” милли проекты сиктәрендә юл хәрәкәтен ойоштороу буйынса 9 техник сара ойошторолған, дөйөм оҙонлоғо 12 километр тәшкил иткән 18 автомобиль юлдары ремонтланған.



**А. Ковшов иң-иңдәргә тәбрикләнә.**

“Мәғариф” милли проекты сиктәрендә Ибраһимов урамындағы 1-се гимназия корпусын төҙәкләндереү буйынса эштәр дауам итә. Шулай уҡ федераль программа буйынса 29-сы мәктәп бинаһы буйынса капиталь ремонт башланған.

“Мәҙәниәт” милли проекты буйынса Тукаев урамында урынлашҡан 1-се балалар музыка мәктәбе бинаһын реконструкциялау буйынса эштәр башҡарылған.

Башҡортостан Хөкүмәте ҡарары менән 2020 йылда Стәрлетамаҡтың бер өлөшө 28 мәҙәни мираҫ объектын индереү менән төбәк әһәмиәтендәге тарихи ҡасаба тип танылды. 2022 йылда реконструкциянан һуң Комсомол урамында урынлашҡан 43-сө йортта (сауҙагәр Патрикеевтың йорто) элекке хәрби часть бинаһында офицер үҙәге, ә сауҙагәр Баязитовтың йортонда «Пиццман һәм Калачев» кафеһы асылды.

– Торлаҡ төҙөлөше күләменең артыуы беҙҙең өсөн амбициялы бурыс. Маҡсатыбыҙ – ҡаланың заманса образын булдырыу, ул граждандарҙың өмөттәренә яуап бирәсәк, – тип йомғаҡ яһаны Эмиль Шәймәрҙәнов.

Сара аҙағында Стәрлетамаҡ ҡалаһының төҙөлөш һәм профессиональ технологиялар колледжы директоры Илдар Ғүмәров уҡыу йортон үҫтереү программалары һәм уның ҡаҙаныштары хаҡында һөйләне. Шулай уҡ “Газпром газ бүлеү Өфө” асыҡ акционерҙар йәмғиәте филиалы директоры Олег Бойцов һәм “ИнвестРайСтройЗаказчик” коммерция директоры Айгөл Мортазина доклад менән сығыш яһанылар.

Төҙөлөш – ҡала үҫешенең төп күрһәткестәренең береһе. Тармаҡтың артабан да 2022 йылдағы һымаҡ йылдам үҫеше Стәрлетамаҡҡа һулыш биреп торасаҡ. Шуға, активта әйтелгәнсә, уға иғтибар ҙа төп урында булырға тейеш.

**Гөлкәй ҠЫУАТОВА.**
**Фото ҡала хакимиәте рәсми сығанаҡтарынан.**

podpiska.pochta.ru

РЕСПУБЛИКАЛА

# Йорт-ҡаралтыны янғындан һаҡлауға ҡағылышлы биш кәңәш

***Йыл башынан республикала 500-ҙән ашыу янғын осрағы теркәлгән, 40-тан ашыу кеше ут ҡорбаны булған. Был былтырғы осор менән сағыштырғанда бер ярым тапҡырға күберәк. Тағы 27 кеше төрлө кимәлдәге тән йәрәхәттәре алған.***



«Рәсәй 24. Башҡортостан» телеканалына биргән интервьюһында Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Башҡортостан буйынса Баш идаралығы начальнигы урынбаҫары Владимир Горин билдәләүенсә, һәләк булыусыларҙың 82 проценты – 55 йәштән өлкән кешеләр. 60 проценты – пенсионерҙар, артабан эшһеҙҙәр, инвалидтар килә, өс кеше – предприятие эшсеһе. Янғындарҙың төп сәбәптәре – ут менән һаҡһыҙ эш итеү, электр ҡорамалдарын монтажлау һәм ҡулланыу ҡағиҙәләрен боҙоу, иҫкергән электр сымдары.

Йорт-ҡураны янғын хәүефенән нисек һаҡларға һәм күңелһеҙ статистикаға эләкмәҫкә?

## ЭЛЕКТР ҠОРАМАЛДАРЫНЫҢ СИФАТЛЫҺЫН ҺАЙЛАҒЫҘ!

Электр ҡорамалдарының һәм сымдарҙың торошон ентекле тикшерегеҙ, был эш өсөн белгес саҡыртыу – тағы ла һәйбәтерәк. Ғөмүмән, электрика мәсьәләһендә ҡулы эш белгән дуҫтарға һәм күршеләргә ышаныс белдерергә кәңәш ителмәй, бының менән профессионалдар шөғөлләнергә тейеш. Камин, мейес һәм мейес торбаларын проектлау һәм эшләүгә ҡағылышлы ла ошондай уҡ кәңәш.

Ҡулланылмаған электр ҡорамалдарын розеткала ҡуйылған килеш ҡалдырмағыҙ. Ҡыҙған, ҡыҫҡа тоташыу хәүефе менән янаған иҫке үтек, фен, сәйнүктәрҙе йәлләмәй ташлағыҙ. Бер ваҡытта ла уҙаллы эшләнгән йылытҡыстар менән ҡулланмағыҙ. Бөгөн сифатлы көнкүреш техникаһының йөнөң теләгәнен һатып алырға мөмкин: ток һуғыуҙан, ҡыҙыуҙан, ҡыҫҡа тоташыуҙан һаҡлаған ҡоролмаһы булған йылытҡысты өс-дүрт мең һумға һатып алырға мөмкин. Телефон өсөн арзан зарядка һатып алмағыҙ, улар ҡыҙып, янып китеүе ихтимал. Электр энергияһын һаҡсыл ҡулланған техника (А+++, А++, А+, А) һайларға тырышығыҙ. Был, аҡсаны янда ҡалдырыуҙан тыш, селтәргә төшкән көсөргәнеште кәметергә лә булышлыҡ итәсәк. Өйҙәге бөтә техниканы бер юлы ҡабыҙырға тырышмағыҙ.

## ЯНҒЫН ИҪКӘРТЕҮ ҠОРАМАЛЫ ҠУЙЫҒЫҘ

Иҫкәртеү ҡорамалы – түбәгә беркетелгән ҙур булмаған түңәрәк әйбер. Үҙе бәләкәй булһа ла, файҙаһы ҙур. Статистикаға ярашлы, төтөнгә тәьҫир иткән янғын иҫкәртеү ҡорамалы ут сығыу осраҡтарында кешеләр үлемен – 70 процентҡа, матди зыянды 30 процентҡа тиклем кәметә. Әсе тауышлы сигнал хужаларға ваҡытында сара күрергә, ҙур янғынға юл ҡуймаҫҡа булышлыҡ итә, уны хатта күршеләр ҙә ишетеүе ихтимал. Һуңғы бер нисә йылда янғын иҫкәртеү ҡорамалдары меңдәрсә кешенең, шул иҫәптән балаларҙың ғүмерен һаҡлап алып ҡалырға булышлыҡ итте.

Ошо көндәрҙә мини-сирена Ҡыйғы районында ағас йортта йәшәгән ҡатынды хәүеф хаҡында ваҡытында иҫкәрткән. Төн уртаһында ошо сигналға уянған ҡатын башта янғынды уҙаллы һүндереп ҡарай, әммә хәлдең мөшкөллөгөн аңлап, өйөнән сығып өлгөрә. Әйткәндәй, янғын иҫкәртеү ҡорамалын уға бюджет аҡсаһы иҫәбенә ҡуйған булғандар. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: Башҡортостан илдә был ҡорамалдарҙы бушлай ҡуйҙырыу мөмкин булған берҙән-бер төбәк. Программа ғәмәлдә булған биш йыл эсендә Өфө ҡалаһында ғына 300 мең мини-сирена таратылған.

Ҡорамал аҙ тәьмин ителгән күп балалы, социаль йәһәттән ауыр хәлдәге балалы ғаиләләргә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына һәм уларға тиңләштерелгән кешеләргә, 55 йәштән оло яңғыҙаҡтарға, сабыйы тыуған ғаиләләргә бушлай бирелә. Был категорияларға эләкмәһегеҙ ҙә, янғын иҫкәртеү ҡорамалын электр тауарҙары магазинында 300 һум тирәһенә һатып алырға мөмкин.

## ЭКОЛОГИЯ ЙӘҺӘТЕНӘН ТАҘАЛЫҠҠА ЫНТЫЛЫҒЫҘ

Бөгөн баҙарҙа йортто, фатирҙы матур итеп биҙәү өсөн материалдар етерлек. Әммә тауар һатып алғанда мотлаҡ уларҙың экология йәһәтенән таҙалығына иғтибар итегеҙ. Янған саҡта зыянлы матдәләр бүлеп сығарған материалдарҙы ҡулланмағыҙ, бындай һауаны бер-ике тапҡыр һулау ҙа үлем сәбәпсеһе булыуы бар.

– Күп осраҡта кешеләр яныуҙан йәки ҡоролмалар ишелеп төшөүҙән түгел, төтөндән һәм кислород етмәүҙән үлә, – ти ҡотҡарыусылар. – Зыян күреүселәрҙең яртыһынан күбеһе янғын урынында уҡ һәләк була, тере ҡалғандарының 42 проценты ныҡ ағыулана, һәр өсөнсө кеше, иҫенә килә алмайынса, дауаханала үлә.

## МАНГАЛ ХӘҮЕФҺЕҘ БУЛҺЫН

Ғәҙәттә, үҙ йортонда йәшәгәндәр йәки дачаһы булған кешеләр ихатала ризыҡ әҙерләргә ярата. Әлбиттә, бында һүҙ тәү сиратта шашлыҡ хаҡында бара. Иң мөһиме: уңайлы һәм сифатлы мангал кәрәк. Ул артыҡ ҡиммәт түгел – ҙур стационар мангалдарҙың хаҡы өс мең һумдан башлана.

Саф һауалағы табын фажиғә менән тамамланмаһын өсөн утты ҡарауһыҙ ҡалдырмағыҙ, мангалды ағас төбөнә ҡуймағыҙ, ут тоҡандырыу өсөн шыйыҡсаны һәр ваҡыт ябыҡ килеш һәм усаҡтан алыҫ тороғоҙ – ул бик тиҙ тоҡана. Һүнгән тәмәке төпсөктәрен, ҡулланылған шырпыны металл һауытҡа һалып, һыу ҡойоғоҙ. Ихатала газ баллоны, бензин, спирт, ацетон һәм башҡа яна торған матдәләр һалынған һауыттар тотмағыҙ.

## ХУЖАЛЫҠТА ЯНҒЫН ҺҮНДЕРГЕС БУЛҺЫН

Өйөгөҙҙә янғын һүндергес бармы? Моғайын, юҡтыр. Күптәр был хаҡта уйламай, бәғзеләр янғын уның йортонда бер ҡасан да булмаясаҡ тип иҫәпләй. Ләкин янғын башланған осраҡта тиҙ арала дөрөҫ эш итеү өсөн янғын һүндергес һәр ваҡыт ҡул аҫтында булырға тейеш. Порошоклы универсаль ут һүндергес һатып алырға кәңәш итәбеҙ, ул янған һәм еңел тоҡанған шыйыҡсаларҙы һүндереү өсөн уңайлы – йорттоң янған стенаһын ғына түгел, компьютер, электр плитәһе, сәйнүкте лә ошо рәүешле һүндерә алаһығыҙ.

## ИҒТИБАРҒА АЛЫҒЫҘ

**Янғынды ҡул аҫтындағы әйберҙәр менән нисек һүндерергә**

**Тупраҡ һәм ҡом**

Улар – утты һүндереүҙә бик һәйбәт саралар. Әммә фатирҙа ҡайҙан тупраҡ табырға? Мәҫәлән, гөл һауытында. Яраткан рауза гөлөгөҙ юҡҡа сығыуы ихтимал, уның ҡарауы ҙур бәләгә юл ҡуйылмаясаҡ.

**Һыу**

Был алым электр ҡорамалдарын һүндереү өсөн бармай. Мәҫәлән, кухня таҫтамалы янып китһә, раковинаға ташлағыҙ ҙа өҫтөнә тиҙ генә һыу ағыҙығыҙ йәки кәстрүл ҡапҡасы менән ябығыҙ. Сүп-сар биҙрәһендә, почта йәшнигендә ут сыҡһа ла, иң һөҙөмтәле сара һыу буласаҡ.

**Ҡалын туҡыма**

Был осраҡта юрған, пальто, балаҫ ҡулланырға мөмкин. Ут сығанағына ҡалын әйберҙе ташлағыҙ һәм һауа инмәҫлек итеп ситтәрен ҡымтығыҙ. Материалды биш минут самаһы шулай тотоғоҙ.

**Электр сымы янһа, нимә эшләргә?**

Әгәр өйҙә янған пластик еҫе сыҡһа, шунда уҡ дөйөм электр щитын һүндерегеҙ. Яңа башлаған электр сымына һыу һибергә ярамай!

**Һәр осраҡта ла ҡотҡарыу хеҙмәтенә – 112-гә шылтыратығыҙ.**

“АШҠАҘАР” ПРОЕКТЫ

# БЕҘГӘ ШАХМАТ КЛУБЫ КӘРӘК!

**Сатраш уйыны бөгөнгө гаджеттар, компьютерҙар донъяһында популярлығын юғалтманымы икән? Ҡалабыҙҙа йәштәр араһында шахмат уйнау мәсьәләһендә эштәр нисек тора? Ошо һорауҙарға яуап эҙләп, шахмат буйынса спорт мастерына кандидат, Стәрлетамаҡ ҡалаһының 2-се балалар һәм үсмерҙәр спорт мәктәбенең сатраш буйынса өлкән тренеры Андрей Сергеевич БЕРЕЖНЕВ менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**



## “Мат” ҡуйғанды һаман да иҫләйем

**– Андрей Сергеевич, тәүҙә үҙегеҙҙең сатраш менән танышыу тарихын һөйләп үтегеҙ әле. Ҡара һәм аҡ фигуралар донъяһына һеҙҙе кем алып килде?**

– 10 йәшемә миңә шахмат бүләк иттеләр. Ә быға фигураларҙы нисек йөрөтөргә икәнен анык ҡына берәһе лә өйрәтмәне. Элек ихата һайын тиерлек өлкәндәр сатраш уйнай торғайнылар бит ул, әле генә был һирәк күренеш. Шул ағайҙарҙың уйнағанын барып ҡарап ултыра торғайным, аҙаҡтан минән бер ҡатка өҫтәрәк йәшәгән күрше егет менән сатраш уйнарға йөрөй башланым. Шуныһы ҡыҙыҡ, ул үҙе студент булһа ла, мин килһәм, бар эштәрен ситкә ҡуйып, сатраш уйнарға ултыра торғайны. Минең менән уйнауҙы ысын уйын тип тә атарлык булмағандыр инде ул, әммә уйындың йөҙөнсө партияһында еңеп тә ҡуйҙым. “Мат” ҡуйғанды һаман да иҫләйем. Минең уйлауымса, шахмат уйынының юбилей партияһында ул егет юрамал еңелергә булғандыр, тим. Был үҙенә күрә мине тағы ла шахмат уйындарын уйнарға дәртләндереп ебәрҙе, әлбиттә. Шунан һуң Пионерҙар һарайына барып, шахмат түңәрәгенә яҙылдым. Унда бик яҡшы тренер Вячеслав Яковлевич Гречанин менән таныштым, ана нәк шул көндәрҙән алып миңә “шахмат ене” ҡағылды ла инде.

## Күбеһен ата-әсәһе алып килә...

**– Бөгөнгө көндә ҡалабыҙҙа сатраш мәсьәләһендә эштәр нисек тора? Шахмат уйнарға теләүселәр өсөн түңәрәктәр, шахмат мәктәбе бармы?**

– Бынан бер-нисә йыл элек көнә шахмат менән ҡыҙыҡһыныусылар бик аҙ ине. Ә хәҙерге ваҡытта ҡалала шахмат уйындарын ойоштороу, уның менән шөғөлләнеү яҡшыра башланы тиергә лә була. Быға мин Стәрлетамаҡ ҡалаһының 2-се балалар һәм үсмерҙәр спорт мәктәбендә бик күп йылдар шахмат уйындарының тренеры һәм судья булып эшләйем. Хәҙер уҙ теләктәре менән шахмат менән ҡыҙыҡһынып килгән балалар һирәк, күбеһен ата-әсәһе алып килә. Кемдәр үҙ теләге менән килгән һәм кемдә бында көслап тигәндәй алып килгәндәр – бик нык айырылып тора. Был уйында үсешергә теләгән бала ғына сәғәттәр буйына партияларҙы рәхәтләнеп уйнай ала, шахмат фигураларын ҡабул итергә һәләтле һәм уға донъя чемпионы булыу мөмкинлеге бирелә. Тағы ла бер хата, 5-6 йәшлек балаларҙы алып киләләр. Ә бит шахмат уйынына өйрәнергә бер ҡасан да һуң түгел. Иң мөһиме – уйын менән ҡыҙыҡһыныырға, түҙемле булырға кәрәк. Шуға күрә, барыбер ҙә балаларҙы шахмат уйындарына 10 йәштәрҙән генә өйрәтә башлаһаң яҡшыраҡтыр тип уйлайым. Сөнки, 5-6 йәштә алып килгән балалар был уйындарҙан тиҙ ялка, сөнки ҡыйын бирелә. Ә ун йәшлек бала аңлы рәүештә ҡабул итә.

Шахмат түңәрәктәренә килгәндә инде, хәҙер бик күп мәктәп, балалар баҡсаларында шахмат түңәрәктәре бар. Әммә ҡалала иң төп шахмат уйындарына өйрәтеү түңәрәге беҙҙә – 2-се балалар һәм үсмерҙәр спорт мәктәбендә урынлашҡан. Бында һәр шәмбе күнекмә турнирҙарын ойоштороп киләм. Ике төркөм алып барам, һәр төркөмдә 20-шәр бала, башлыса ҡаланың 7-се, 32-се һәм 34-се мәктәп уҡыусылары менән эшләйем.

## Уҡыусылары – Рәсәй чемпиондары

**– Балалар менән шул тиклем тырышып эшләгәс, уның һөҙөмтәләре лә барҙыр?**

– Әлбиттә, 26 йылдан ашыу хеҙмәтемдә бик күп республика, Рәсәй кимәлендәге ҡаҙаныштар бар. Әллә күпме сатрашсылар быуыны үсеп сыкты. Иң ҡыуанысы, сатраш уйындары балалар өсөн яҡшы тормош юлдашына әүерелеүе. Минең дүрт уҡыусым сатраш буйынса тренер-уҡытыусы һөнәрен һайланы. Икәүһе хәҙер үҙемдән хеҙмәттәштәрем. Светлана Владимировна Осипова һәм Павел Анатольевич Михайлов ун йәштәр тирәһендә беренсе тапкыр сатраш уйындары серҙәренә төшөнөргә килгәйне, әле бына үҙҙәре балаларға уйындарҙың үҙенсәлектәрен өйрәтә.

Екатерина һәм Татьяна Федотоваларҙ, сатраш буйынса Республика чемпиондары, Бөтә Рәсәй фестивалдәре еңеүселәре булдылар. Беҙ Мәскәү, Санкт-Петербург, һамар һ.б. өлкәләрҙә уҙған ярыштарҙа ҙур еңеүҙәр яулап ҡайта торғайныҡ. Яңыраҡ тағы бер уҡыусым – Ермаков Максим, Волга буйы федераль округы беренселегендә икенсе урын алды һәм Рәсәй беренселегенә үтте. Ул ярыштар апрель айында уҙасаҡ.

Шуныһы ҡыҙғаныс, хәҙер ололарҙы сатраш уйындарына йәлеп итеүе ҡыйын. Шуға күрә, турнирҙар күбеһенсә ветерандар менән балалар араһында үтә. Быға был етешһеҙлекте бөтөрөү өсөн ҡалала сатраш клубын булдырырға кәрәк, тип уйлайым.

**– Шахмат серҙәренә төшөнөүҙең айырым берәй методикаһы бармы?**

– Бөгөнгө көндә методик әҙәбиәттәр етерлек. Уйын уртаһында, аҙағында ниндәй хәрәкәттәр яһарға – барыһына ла өйрәнеп була. Беҙҙең заманда интернет та юк ине. Хәҙер компьютерҙарҙы ла ҡулланып була. Теләгән һәр кем үҙен шунда ла тикшереп ҡарай ала. Шулай ҙа күҙмә-күҙ ҡарашып, ултырып уйнауға етмәй инде.

**– Был уйындың файҙаһы нимәлә?**

– Ғөмүмән, сатраш төптән уйлап эшләргә, тәртипкә өйрәтә. Образлы һәм абстракт күҙаллауҙы үҫтерә, уҡыуҙа ла ярҙам итә. Тормош та гел еңеүҙәрҙән генә тормаған кеүек, сатраштa ла шулай. Еңелеүҙәрҙән ҡурҡмайынса, көслөрәк уйынсыларҙан өйрәнеп шөғөлләнергә кәрәк.

Был файҙалы уйынды һәр кемгә уйнарға тәҡдим итер инем. Мәктәп йылдарынан башлап, хаклы ялға сыҡҡас та дауам итергә.

**Әңгәмәне Гөлкәй ҠЫУАТОВА ҡорҙо.**



**Мәктәп тәрбиәләүселәре йыш ҡына төрлө кимәлдәге ярыштар еңеүсеһе була.**

---

Стәрлетамаҡ ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
“Ашҡаҙар” ижтимағи-сәйәси гәзите
Стәрлетамаҡ ҡалаһының 2-се спорт мәктәбе

**18 февраль,**
**Братская урамы, 9-сы йорт**

**Махсус хәрби операцияла ҡатнашкан яугирҙар иҫтәлегенә бағышланған “Ашҡаҙар” гәзите призҙарына шахмат буйынса Асыҡ ҡала турниры**
**Үткәреү ваҡыты: 10:00 – 18:00**
**Инеү бушлай**

**Проекттың партнерҙары:**

*- Стәрлетамаҡ ҡалаһы ҡала округы хакимиәте мәғариф бүлеге*
*- Стәрлетамаҡ ҡалаһы ҡала округы хакимиәте Стәрлетамаҡ ҡалаһы спорт комитеты*
*- “ВСК” страховкалау йорто*
*- “Ҡайынҡай” (“Берёзка”) шифаханаһы*
*- “Берҙәм Рәсәй” сәйәси партияһы.*

---

СӘЛӘМӘТЛЕК

# Барыбер зарарлы инде

**Ысын булған хәл: бер ваҡыт бер уртансы класс уҡыусыһы электрон тәмәке тартып торғанын әсәһе күреп ҡалған да, “әҫә табала ҡыҙҙыра” башлаған икән малайҙы. Шул саҡ уҡыусы аптырап тормаған: “Әсәй, улай нык борсолма, был тәмәке электрон ғына бит”, – тип әйткән.**

Шаярыу шаярыу менән, бынан ике тиҫтә йыл элек Ҡытайҙа барлыкка килгән электрон тәмәке хәҙер Рәсәй менән Европаны “яулай” бара. Әле дөйөм тартыусыларҙың ни бары ике проценты был төр тәмәке тартһа ла (статистика мәғлүмәттәренә ярашлы), ҡулланыусылар йылдан-йыл арта бара.

Әлбиттә, башта, хәтерләйһегеҙҙер, электрон тәмәкене хатта һимереүгә ҡаршы көрәштә файҙалы, дауалай, тип тағы әллә ниндәй ыңғай мисалдар килтерә инеләр. Шулай уҡ, кеше төтөн түгел, янып бөткән төтөндең парын тарта, тимәк, үпкәгә зарар түгел, тәмәке тартыуҙы ташларға ярҙам итә тип тә өҫтәйҙәр ине. Хәҙер иһә, ғалимдар электрон тәмәкенең дә зарарлы булыуын, организмға нәк “артык килограмдар” өҫтәлеүенә булышлыҡ итә, тәмәке тартыуға күнектерә һәм, үпкәгә зарар килтереп, хатта яман шеш барлыкка килеүе ихтимал тип аңлаталар.

Нисек кенә булмаһын, йәштәрҙе көндән-көн үҙенә йәлеп итә барған был тәмәкенән ҡотолоу урынлы. Был йәһәттән, әйткәндәй, Рәсәй Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин ошо мәсьәләне ҡарарға һәм профилле комитеттарға тәҡдимдәр индерергә ҡушты. Спикер билдәләүенсә, был башланғыс уҡыусылар араһында вейп тартыуҙың популяр була барыуы менән аңлатыла.

Бынан тыш, Рәсәй Дәүләт Думаһы никотинды электрон илтеп биреү системалары өсөн тәмәкегә акциздарҙы арттырыу тураһында ҡарар ҡабул итте. Йөмғиәт йәнә лә арабыҙға килеп ингән яман күренештән ошолай еңел ҡотолһон ине лә бит...

**Р. МАНСУРОВ.**

podpiska.pochta.ru

# УТЫҘ ЙЫЛЛЫҠ ЭШ ТӘЖРИБӘҺЕ БУЛҒАН ЙӘШ БЕЛГЕС... КӘРӘК!

**Йәш кеше өсөн эшкә урынлашыу – ул һәр ваҡыт ауыр һынау. Кадрҙар бүлеге етәкселәре һәм хеҙмәткәрҙәре юғары уҡыу йорттарын тамамлаусыларҙы көтөп тормайынса, өлкән кешеләрҙе алырға тырыша. Етмәһә, иң ауыртҡан ергә тейеп, булмаған эш тәжрибәһе хаҡында һораша. Ә кисә ҡулына диплом алған белгескә булмаған тәжрибәне ҡайҙан алырға һуң?!.**
**Әңгәмәләшеү үткәндән һуң, йәш кешенең рухи төшөнкөлөккә бирелеүе ихтимал. Бөгөн беҙ эш тәжрибәһен ҡайҙан алырға тигән һорауға яуап эҙләйәсәкбеҙ. Был мәҡәләлә мөмкин булған бөтә варианттар ҙа ҡараласаҡ.**

## Ҡасан эшкә урынлашырға?

Эшкә уҡыу йортон тамамламаҫ элек урынлашырға кәрәк. Хәйер, хәҙер бик күп студенттар шулай итә лә инде. Алдан яҡшы эшкә урынлашыр өсөн эш тәжрибәһен тупларға кәрәк тигәнгә йәлап өйрәнә торһаң, хәйерлерәк булыр. Беҙ һеҙгә беренсе курста белем алғанда уҡ эш хаҡында уйларға тәҡдим итмәйбеҙ.

Тәүҙә эш тәжрибәһе нимә икәнлеген асыҡларға кәрәк. Был һеҙҙең ниндәй ҙә булһа тәжрибә буласаҡ. Нимә ул эш? Был – эш хаҡын алып, билдәләнгән ваҡытта һәм шарттарҙа эшләү. Был һеҙҙең һөнәрегеҙ буйынсамы, юҡмы икәнлеге мотлаҡ түгел. Йәғни, ниндәй эштә булһа ла үҙегеҙ тәжрибә туплау.

Күптәр эш стажы һәм эш тәжрибәһен бутай, был төрлө әйберҙәр. Стаж ул – рәсми рәүештә предприятиела эшләгән йылдар. Ә эш тәжрибәһе – һеҙҙең ниндәй ҙә булһа практикала үткән тәжрибә, рәсми рәүештә эшкә урынлашмайынса ла алған тәжрибә ул. Хатта студенттарҙың производство практикаһы ла эш тәжрибәһе булып тора, сөнки унда һеҙ буласаҡ һөнәргә эйә булыу өсөн төп белемде туплағанһығыҙ. Рәсми эшкә урынлашҡанда ла был эш биреүсегә ҡыҙыҡлы буласаҡ, һеҙ ҡасан да булһа был өлкәлә эшләп ҡарағанһығыҙ икән, вакансия һеҙҙең кеҫәгеҙҙә тиергә лә була.

Әгәр ҙә студент уҡыуҙан буш ваҡытында эшләгән булһа, был да өҫтөнлөк булып тора. Тимәк, эшкә килгән кешене маҡсатҡа ынтылыш, эшһөйәрлек кеүек сифаттар билдәләй.

## Ни өсөн тәжрибәһеҙ эшкә алмайҙар?

Эш тәжрибәһе булмаған йәш кешеләрҙе ни өсөн эшкә ала һалып бармайҙар тиһегеҙме, сөнки эш биреүселәрҙең күбеһе яңы хеҙмәткәргә ваҡытын, аҡсаһын һәм көсөн һалырға теләмәй. Шуныһы ғәжәп түгел, дүрт йылда һөнәр буйынса уҡыған бакалавриат эш урынына ултырырға һәм бурыстарын үтәргә әҙер түгел. Уға эш шарттарына, ҡорамалдарына һәм эш режимына яраҡлашырға кәрәк. Университетта алып бөтмәгән белем һәм оҫталыҡ талап ителеүе ихтимал. Был яңы программалар, яңы технологиялар һәм эштә яңы принциптар.

Мәҫәлән, студент журналист һөнәре буйынса юғары уҡыу йортон тамамлаған икән, уны радио йәки алып барыусылар сифатында шунда уҡ эшкә алмаясаҡтар. Тәүҙә уға айырым бер каналда ғына журналистың эш принциптары менән танышырға тура киләсәк. Нисек сценарий төҙөргә, нимә әйтергә кәрәклеге хаҡында белергә, өйрәнергә кәрәк буласаҡ.

## Нисек тәжрибә тупларға?

Тәү сиратта, һеҙҙең уҡыу йортонда булған производство практикаһына иғтибар итегеҙ. Был һеҙҙең һөнәрегеҙ буйынса тәүге эш тәжрибәһе буласаҡ. Юғары уҡыу йортонда уҡыһағыҙ, дүрт йылығыҙҙы юҡҡа үткәрмәй, компетентлы белгес булып сығырға тырышығыҙ, тигән кәңәш бирәбеҙ йәштәргә.

Икенсе сиратта, төрлө стажировкаларға күҙ һалығыҙ, остаздарығыҙҙан һорашығыҙ. Киләсәктә эш биреүсене эш стажы, дәрәсәрәге, уның булыу-булмауы борсоясаҡ.

Бөгөнгө көндә уҡыу йорттары – төрлө предприятиелар, ойошмалар менән тығыҙ бәйләнештә. Һәр студент уларҙа стажировка үтә ала, был киләсәктә рәсми эш табыу, һөнәр буйынса тәжрибә тупларға ярҙам итәсәк.

Университетта уҡығанда уҡ, йәш кешегә үҙенең үҫеше тураһында үҙаллы ҡайғыртырға кәрәк. Быны өсөн хәҙер төрлө уҡытыу курстары, онлайн-дәрестәр ҙә табырға була.

Әгәр ҙә оҙаҡ эш таба алмаһағыҙ, эш тапҡансы хеҙмәт биржаһына торорға кәңәш бирәбеҙ. Һеҙҙең унда эш стажы ла барасаҡ, шулай уҡ һеҙ эшһеҙлек буйынса пособие ала алаһығыҙ. Халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәгенә университетты тамамлап диплом алғандан һуң теркәлергә мөмкин.

Шулай уҡ эш урындары вакансиялары йәрминкәһенә йөрөһәгеҙ ҙә тиҙерәк эш табыуығыҙ ихтимал. Быңдай йәрминкәләр Стәрлетамаҡта ла йыл һайын уҙғарылып тора.

Хәҙерге заманда күбеһе туғандары йә таныштары аша ла эшкә урынлаша. Шуға күрә, һеҙ ҙә тирә-яҡтағыларҙан эштәрендәге буш урындар тураһында һорашып йөрөгөҙ. Ҡайһы ваҡытта вакансияларҙы интернетҡа ҡуйып өлгөрмәйҙәр, әйтәйек, хеҙмәткәр эштән китергә йыйынған булып, ике аҙна эшләргә ҡалған булһа, осраҡлы рәүештә ошо урынға эләгеп китеүегеҙ ихтимал.

## Мәғлүмәтте дөрөҫ еткереү мөһим

Эшкә урынлашҡанда резюмены тултырыу ҙа үҙенә күрә бер оҫталыҡ талап итә. Эш тәжрибәһе тигән юлға, уҡыуҙан тыш, эшләгән урынығыҙҙы яҙырға мөмкин. Мәҫәлән, әгәр ҙә һеҙ китапханасы һәм текст яҙыусы булып эшләп ҡарағанһығыҙ икән, һеҙҙә грамоталылыҡ, тексты тиҙ йыйыу тәжрибәһе бар, тимәк, хәҙерге заманға бик ҙур ихтыяж менән ҡулланған копирайтер һөнәре буйынса еңел генә эшкә инеп китә алаһығыҙ. Шуны ла онотorға ярамай, интернетта эшләү – студенттар өсөн ул да тәжрибә.

Әгәр ҙә үҙ һөнәрегеҙ буйынса стажировка үткән булһағыҙ, был бик ҙур ыңғай күренеш, мотлаҡ ошо мәғлүмәтте эш тәжрибәһе юлына яҙып ҡуйырға кәрәк. Стажировка урынын күрһәтегеҙ һәм характеристиканы ла бер юлы беркетегеҙ. Был да шулай уҡ һеҙҙең кандидатурағыҙҙы ҡарағанда иҫәпкә алынасаҡ. Әлбиттә, һәр вакансия өсөн айырым резюме яҙырға кәрәк.

...һайлай һәм эҙләнә белһәң, эш урындары күп, шул уҡ ваҡытта яҡшы хеҙмәт хаҡы менән дә. Тик мәғлүмәт туплап, ваҡытында электрон ҡалырға кәрәк. Әлбиттә, эшкә урынлашыу бер, эш биреүсенең талаптарына тура килергә, хеҙмәтеңде еренә еткереп башҡарырға ла кәрәк бит әле. Үкенескә ҡаршы, аҙ ғына, еңел генә эшләп, кеҫә тултырып хеҙмәт хаҡы алырға теләгән йәштәр ҙә юҡ түгел бөгөнгө заманда. Хәйер, уныһы инде икенсе мәсьәлә, уның тураһында һүҙебеҙ башҡа яҙмаларҙа булыр.

**Гөлкәй ҠЫУАТОВА.**

# ТӨПЛӨ БЕЛЕМГӘ ЭЙӘ БУЛҒЫҢ КИЛҺӘ, ҮҘЕБЕҘҘӘ УҠЫ!

## Стәрлетамаҡ уҡыусыларына һөнәри йүнәлеш бирҙеләр

**Ошо көндәрҙә Өфө фән һәм технология университетының Стәрлетамаҡ филиалы буласаҡ сығарылыш уҡыусыларына һөнәри йүнәлеш биреү, һөнәри үҙбилдәләнештә ярҙам итеү, һөнәр һайлау маҡсатында Башҡортостан Республикаһының тиҫтәләгән юғары уҡыу йорттары вәкилдәре менән осрашыу үткәрҙе.**



**Уҡыусылар ВУЗ вәкилдәренә һорауҙар ҙа яуҙырҙы.**

Тәүҙә уҡыусылар төрлө оҫталыҡ дәрестәрендә ҡатнашты, Башҡортостан Республикаһының юғары уҡыу йорттары күргәҙмәләрен һәм презентацияларын ҡараны.

Сараның рәсми өлөшөн Стәрлетамаҡ ҡалаһы ҡала округы хакимиәтенең эштәр идарасыһы Зәлиә Баринова һәм филиалдың директоры, Игорь Сыров асты.

– Һеҙҙе ҡала хакимиәте башлығы Рөстәм Ғәзизов исеменән сәләмләйем. Бына Стәрлетамаҡ йәнә республиканың иң алдынғы юғары уҡыу йорттарын һәм буласаҡ сығарылыш класс уҡыусыларын бер урынға йыйҙы. Нәҡ ошонда, һеҙ, буласаҡ абитуриенттар, үҙегеҙгә кәрәкле мәғлүмәт, киләсәккә һөнәри йүнәлеш һайлай алаҫаҡһығыҙ, – тине үҙенең сығышында Зәлиә Фәнис ҡыҙы.

Артабан иһә һүҙҙе уҡыу йорто етәксеһе алды:

– Үҙебеҙгә уҡырға саҡырып, шуны әйткем килә, Өфө фән һәм технологиялар университетының Стәрлетамаҡ филиалындағы бөтә йүнәлештәр ҙә аккредитацияланған, тимәк, һеҙ дәүләт өлгөһөндәге дипломдар алаҫаҡһығыҙ, – тип сәләмләне килгән ҡунаҡтарҙы Игорь Анатольевич.

Юғары уҡыу йорттарының презентацияһы модераторы булып Зәһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтының уҡытыу һәм тәрбиә эштәре буйынса проректоры Алһыу Хәсбиуллина сығыш яһаны.

Буласаҡ абитуриенттар менән осрашыуҙар йылы һәм ышаныслы мөхиттә үтте. Юғары уҡыу йорттарынан килгән һәр вәкил үҙҙәренең уҡыу йорттары, булған факультеттар, йүнәлештәр, ҡабул итеү ҡағыҙҙәре, документтарҙы тапшырыу ваҡыты тураһында ентекләп һөйләне. Уларҙың сығыштары презентациялар һәм видеороликтар менән оҙатылып барҙы.

Осрашыу аҙағында буласаҡ абитуриенттар үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуап алды.

Әлбиттә, был сара буласаҡ абитуриенттарҙы уҡыу йорттарына йәлеп итергә, шулай уҡ мәктәп уҡыусыларына аңлы рәүештә һөнәр һайларға мөмкинселек биреп кенә ҡалмай, шул уҡ ваҡытта уҡыусыларҙы сит тарафҡа ебәрмәйенсә, үҙебеҙҙең республикала урынлашҡан юғары уҡыу йорттарында ҡалдырыуҙы күҙ уңында тотто. Сөнки Башҡортостандағы уҡыу йорттары сит тарафтарҙағынан, Мәскәү, Санкт-Петербург, Ҡазан һәм башҡа ҡалаларҙа урынлашҡан уҡыу йорттарынан һис кенә лә ҡалышмай, кимәле лә юғары һәм төплө белем дә бирә улар.

**Гөлкәй ШИҺАПОВА.**
**Динара ИСХАҠОВА фотоһы.**

### ҺҮҘ – ҠАТНАШЫУСЫЛАРҒА:

**Ольга ПИЩУРИНА, ҡалабыҙҙағы 20-се мәктәптең 10-сы класс уҡыусыһы:**

*– Бөгөнгө сара бик ныҡ оҡшай, беҙҙе бында класс етәксебеҙ Артюкова Елена Сергеевна алып килде, бөтәһе 14 уҡыусы килдек. Киләсәктә программист һәм 3Д моделләү һөнәрен уҡып сығып, йәнһүрәттәр эшләгем килә. Шуға күрә берҙәм дәүләт имтиханына ла информатика менән физиканы һайланым.*

**Кирилл ШМЕЛЕВ, 3-сө башкорт-лицей интернатының 10-сы класс уҡыусыһы:**

*– Бөгөн Өфө фән һәм технологиялар университетының Стәрлетамаҡ филиалы ойоштор-ған ҙур сараға килеүемә шатмын. Тәүҙә юғары уҡыу йорттарының күргәҙмәләрен ҡарап сыҡҡандан һуң, барыбер ҙә киләсәктә үҙебеҙҙең филиалға уҡырға килергә булдым. Информатика фәне менән ҡыҙыҡһынам, уны төплө өйрәнгем килә.*

podpiska.pochta.ru